Мосолман тормошо

# ӨЙЛӘНЕҮ, ҒАИЛӘ ҺӘМ ИСЛАМ ӘҘӘБЕ



"Ғаилә кешене шундай мөхит менән солғап ала һәм тәьмин итә, унда кеше ҡиммәттәре һәм әхлағы яңы быуында барлыҡҡа килә һәм үҫә: әлеге ҡиммәттәр һәм әхлаҡ ғаиләнән башҡа йәшәй алмайҙар. Ғаилә мөнәсәбәттәренең тәҙәләшө һәм енестәр араһындағы үҙ-ара мөнәсәбәттәр тулыһынса йәмғиәттең характерын, уның артта ҡалыуын йәки мәҙәниәтен билдәләйҙәр" (Сәйет Ҡутб).

Ир һәм ҡатын булып йәшәү, ғаилә бик тә мөһим булғанлыҡтан, Ҡөрьәндең аяттарынан һәм пәйғәмбәр, ғәләйһис-сәләм, әйткәндәрҙең күп кенә өлөшө ошо ике мәсьәләгә ҡағыла. Был сығанаҡтар бәхетле ғаилә тормошо, сәләмәт һәм әхлаҡи йәмғиәт өсөн нигеҙ булып торалар һәм кәрәкле нәмәләрҙе тасуирлайҙар.

1. Мосолманға мөмкин ҡәҙәр иртәрәк өйләнергә тәҡдим ителә. Өйләнешеү туғандарҙың һанын арттыра, сит баланы һөт менән туйындырыу ҙа рөхсәт ителә, был да ғаиләне һөт ағайэнэ, апай, һеңле тип йөрөтөләүсе туғандарға арттыра.

2. Туй үткәреүҙең шаҡтай еңел бурыс булыуы яҡшыраҡ. Ислам күҙлегенән ҡарағанда, яҡшы туй кейәү менән кәләшкә мөмкин ҡәҙәр аҙыраҡ мәшәҡәт тыуҙыра.

3. Ислам күҙлегенән ҡарағанда, туйҙы байрам итеү маҡтаулы эш булып тора, сөнки туй ижтимағи күренеш.

4. Исламда йырлау, ғөмүмән, тыйылһа ла, туйҙа йырлау рөхсәт ителә.

5. Туй мәжлесендә ҡатнашырға тәҡдим ителә, мөмкинлек булып та был саҡырыуҙан баш тартыу яҡшы түгел.

Ир менән ҡатын араһында билдәле бер маҡсаттарға ирешелер тип иҫәпләнелә. Әммә уларға тейешле бер шарттарһыҙ ирешеп булмай. Шарттар һәм тәҡдимдәр түбәндәгеләр:

1. Никахлашырға ир-ат һәм ҡатын-ҡыҙҙың тулы ризалығы.

2. Ир менән ҡатындың уртаҡ ҡараштары һәм үҙ-ара аңлашыуҙары кәрәк. Тормоштоң ғөмүми концепциялары, уның ысулдары һәм күңелһеҙ хәлдәрҙән сығыу юлдары кәрәк, йәғни Исламда һәм шәриғәттә ҡаралған нәмәләр. Иң яҡшылары - Исламға тоғролоҡло ир менән ҡатын.

3. Өйләнешеү алдынан беренсе аҙым булараҡ, Ислам ирәтҡа һәм ҡатын-ҡыҙға бер-береһенең Исламды белеүҙәрен, уға тоғролоҡло булыуҙарын белергә, шуға ышанырға тәҡдим итә. Шулай уҡ улар туйға ҡәҙәр осрашырға тейештәр.

4. Никах килешеүҙең барлыҡ шарттарын үтәү шулай уҡ иң яҡшы эштәрҙең һәм юғары әхлаҡлылыҡтың бер үрнәге булып тора. Мөхәммәд пәйғәмбәр, ғәләйһис-сәләм, әйткән: "Мосолман никах килешеүенең иң ҡиммәтле шарттары үтәлергә тейеш".

5. Ислам ваҡытлы никахтарҙың барыһын да кире ҡаға һәм ғүмерлек никахтарҙы ғына таный.

6. Асыуланышҡан осраҡтарҙа ир менән ҡатынға үҙ проблемаларын башҡалар ярҙамынан файҙаланмайынса хәл итергә кәңәш бирелә.

7. Ир менән ҡатын араһындағы үҙ-ара мөнәсәбәттәр үҙара ярҙамға, мөхәббәт һәм шәфҡәтлелеккә ҡоролған булырға тейеш.

Ислам әҙәбен өйрәнеү Исламда ир менән ҡатын булып йәшәүҙең мөһимлеген күрһәтә. Ислам әҙәбе ир менән ҡатын араһындағы үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙең түбәндәге төрҙәрен таный:

1. Әгәр ир менән ҡатын булып йәшәмәгәндәр икән, ирҙәргә үлгән-ҡатын-ҡыҙҙың кәүҙәһен йыуырға ярамай һәм киреһенсә. Ҡатыны үлгән осраҡта ир уның кәүҙәһен ҡәбергә һала ала.

2. Ир менән ҡатын булмайынса, бер-береһе менән ҡанҡәрҙәшлек менән бәйләнгән булһалар ҙа, әйтәйек, ир һәм ҡыҙ бер туғандар, әсә һәм балалар булһалар ҙа, ир-ат менән ҡатын-ҡыҙға бер-береһенең оят ерҙәренә ҡарарға рөхсәт ителмәй.

3. Ҡатын-ҡыҙҙарға үлгән туғандарын, ир туғандарын һәм атаһын да индереп, иҫкә алып өс көндән дә артыҡ иларға ярамай. Әммә ҡатын үҙенең ире тураһында дүрт ай ҙа ун көн ҡайғыра ала.

Ислам әхлағында атаәсәләр менән балалар араһындағы мөнәсәбәттәр ҙә мөһим урын алып тора. Мөхәммәд пәйғәмбәр, ғәләйһис-сәләм: "Ожмах - әсәйҙәрҙең аяҡ аҫтында", - тип әйткән. Башҡа кешеләргә яҡшы мөғәмәлә булыу әҙәплелек булһа, ата-әсәгә ҡарата был инде дини бурыс булып тора.

Ныҡлы туғанлыҡ хистәре, тоғролоҡ һәм яуаплылыҡ балалар һәм ата-әсәләр менән генә сикләнмәҫкә, ә бәлки барлыҡ туғандарҙы ла үҙ эсенә алырға тейеш.

Беренсенән, иҫән-һау һәм яҡшы кәйеф менән йәшәүҙәрен белер өсөн туғандар янында даими булып торорға кәрәк.

Икенсенән, хәллерәктәре үҙҙәренең мохтажлыҡ кисереүсе туғандарына ярҙам итергә тейештәр. Әгәр мосолман бурыслы булып үлеп китһә, уның туғандары был бурысты мөмкин тиклем тиҙерәк түләргә тейештәр.

Ҡатын-ҡыҙға сит кеше балаһын күкрәк һөтөн имеҙеп үҫтерергә рөхсәт ителә, сөнки был туған-тыумаса даирәһен арттыра.

Ислам әҙәбендә ғаилә мөнәсәбәттәре шуның өсөн ентекләп тикшерелә - сөнки ғаилә кешелек хистәренең барлыҡ спектрҙарын булдырыу өсөн нигеҙ булып тора һәм шунлыҡтан тотроҡло ғаилә тормошо хеҙмәт итә.

***"Башҡортостан дини календарь"ҙан алынды.***

# БӘРӘКӘТ

***"Бәрәкәт" тигән һүҙ беҙҙең халыҡта һәр нәмәнең файҙалы, файҙаға булыуын аңлата. Бәрәкәт ул - һаҡсыллыҡ менән йәшәй белеү, бар малды арттырып, ишәйтеп тороу, әйберҙе тәләф итеүҙән һаҡланыу, муллыҡ, Аллаһы Тәғәләнең бәндәгә биргән бер рәхмәте.***

Әммә был төшөнсә малға һәм ризыҡҡа ҡарата ғына ҡағыла. Кеше рухи байлыҡтарын исраф итеүгә лә юл ҡуймай, уны ишәйтә бара белергә тейеш, тип өйрәтә дин.

Сөнки рухи байлыҡтарҙы бөтөнләй туҙҙырып бөткән кеше генә мал табыу өсөн ҡәбер тиклем ҡәберҙәргә барып инә ала. Ә бит дин беҙҙе икенсе төрлө өйрәтә, ҡәберҙәргә барып ингәндә лә: "Эй, Раббыбыҙ! Беҙҙең гонаһтарыбыҙҙы ярлыҡа! Беҙҙән элек иман менән донъянан үткән дин ҡәрҙәштәребеҙҙе ярлыҡа, иманлы бәндәләргә ҡарата күңелдәребеҙҙә асыу һәм хөсәтлек урынлаштырма!" - тип инергә бойора.

Бәрәкәтле тормош ул - Аллаһҡа яҡын булыу билдәһе, игелекле ғәмәлдәр менән килгән татлы емеш.

Аллаһ өйрәтә: "Һиңә индерелгән Китап бик тә файҙалы, бәрәкәтле. Беҙ уны аҡылы булған кешеләр уйлап, фекер йөрөтөп файҙалана белһен, вәғәз алһын тип индерҙек".

Кешенең ғүмер иткән төйәгендә лә бәрәкәт булһын, - тип өйрәтә Ҡөрьән. - Сөнки бөтә ерҙә лә бәрәкәт бар тип әйтеп булмай. Бәрәкәт булмаған өсөн дә бәндәләрҙең күсенеп йөрөүҙәре арткандан-арта бара. Күсенеп йөрөүселәр бөгөн дә етерлек. Шундай хәлдәргә төшмәҫ өсөн Нухҡа ла, ғәләйһис-сәләм, Аллаһ: "Эй, Раббым! Хәйерле индереү менән мине бәрәкәтле, хәйерле урынға индер!" - тип доға ҡылырға бойора.

Ибраһимдан, ғәләйһиссәләм, башлап бөтә пәйғәмбәрҙәр нәҫеленә йәки өммәтенә Аллаһ бәрәкәт биреп тора. "Һеҙгә Аллаһтың рәхмәте һәм бәрәкәте булһын", - ти.

Аллаһ ул бәрәкәт сығанағы ғына түгел. "Бөтә ғаләмдәрҙең тәрбиәсеһе булған Аллаһ үҙе лә бәрәкәт эйәһе".

Тимәк, мосолман тормошонда һәр нәмәнең бәрәкәте булырға, бәрәкәттәр артып ҡына торорға тейеш. Аллаһ ризалығы, Уның ихтыяры менән тормошона бәрәкәт, тәненә сихәт, шифа һәм дауа өҫтәлеп торған кеше әхирәттә лә бәрәкәттән мәхрүм ҡалмаҫ өсөн хатта ҡәберҙә лә изге бәндәләр менән бергәрәк булырға теләгән. Насар кешеләр тураһында һүҙ барғанда беҙҙә лә: "Уның менән ҡәберең яҡын булмаһын!" - тип әйтәләр.

"Ислам дине биш нигезгә корылган:

**Аллаһтын башка илаһи зат юк, Мөхәммәд (салләллаһү галәйһи вә сәлләм) Аның колы һәм илчесе дип, чын күңелдән ышану;**

**Намаз уку;**

**Зәкят бирү;**

**Хаҗга бару;**

**Рамазан аенда ураза тоту".**

# КУНАКНЫ ХӨРМӘТ ИТҮ

"Аллаһыга һәм Кыямәт көненә ышанган кеше үз кунагына хөрмәт күрсәтсен".

Рухы юмарт мөселман үзенең кунакчыллыгы белән аерылып тора. Ул кунакларны шатлык белән каршы ала һәм аларга хәленнән килгәнчә кадер - хөрмәт күрсәтә.

"Аллаһыга һәм Кыямәт көненә ышанучы кеше үз кунагына, аңа бүләк сыйфатында, хөрмәт күрсәтсен". Кешеләр сораганнар: "Аңа бүләк нисек була соң?" "Көн һәм төн, ә кунакчыллыкны өч көн дәвамында күрсәтергә кирәк, аннан артыгы садака була".

Ислам кунакчыллык кагыйдәләрен тәртипкә салуны да читләтеп узмаган. Мәсәлән, кунакка бүләк булып бер тәүлек тора; аннары өч көн мәҗбүри кунакчыллык; ә бу вакыттан артканы садака булып санала.

"Ике кеше ризыгы - өч, ә өч кеше ризыгы дүрт кешегә җитә". Ислам ике кешегә әзерләнгән ризык өч кешегә, ә өч кешегә әзерләнгән ризык дүрт кешегә җитә, дип көтелмәгән кунак килүдән бервакытта да курыкмаска өйрәткән.

Бер вакыт Пәйгамбәребез янына бер кеше килгәч, аны ансарларның берсе үзенең өенә алып кайткан. Кайткач хатынына: "Аллаһ Илчесенең кунагын сыйла", - дигән. Хатыны: "Бездә балалар өчен булган ризыктан башка бернәрсә дә юк бит", - дигән. Ул әйткән: "Кичке ашны әзерлә, әгәр балаларның ашыйсылары килсә, йокларга яткыр". Хатыны ашарга пешергән һәм балаларны йокларга салган. Кунак алдына ризык китергәч хатын гүя ки шәмдәлне төзәтер өчен торган булып аны юри сүндерә, шуннан соң алар ире белән ашаган булып кыланалар һәм ач килеш йокларга яталар. Иртән бу ансар Аллаһ Илчесе янына килгәч, Пәйгамбәребез: "Сезнең бу төндә кылган шул эшегезгә Аллаһы Тәгалә бик гаҗәпләнде, таң калды!" - дигән.

"Әгәр сез берәүдә тукталсагыз, һәм сезгә кунакка тиешле нәрсәләр бирелсә, шуны алыгыз, әгәр алар моны эшләмәсәләр, кунак хакына алар бирергә тиешлене үзегез алыгыз".

Кунакка тиешле хакларны үтәүдән баш тарту очракларында, Ислам кунакка үзенә тиешлене алырга рөхсәт итә. Кунакны хөрмәт итү-итмәү Исламда шәхси эш булып саналмый, ул - мөселманның бурычы.

"Озак кунак булырга рөхсәт ителми, чөнки ул хуҗаны авыр хәлгә куячак". Әгәр зирәк мөселман үзенең кардәшендә кунакта булса, ул анда озак тоткарланмый. Чөнки ул башкаларны мәшәкатьләүдән тыючы күрсәтмәләргә җитди карый. Ислам кунакта үз-үзеңне тоту кагыйдәләрен өйрәтеп, үзеңне кабул иткән кешеләргә мәшәкать тудырмаска, аларның теләк һәм кисәтүләрен исәпкә алырга боера.

"Әгәр сезгә халык арасында хөрмәте булган бер кеше килсә, сез дә аңа хөрмәт күрсәтегез".

"Рәсүлебез галәйһиссәләм кунакны артык кыстаудан тыйган".

Шулай ук, Рәсүлебез галәйһиссәләм кунак өчен гадәттән тыш чыгымнар чыгарудан тыйган. Кунак килә икән, кулында булган ризыкны алдына китер, хәзинәдә бары белән кунак ит, үзең гадәттә нәрсә ашыйсың, кунагыңа да шуны куй.